

# Электрон дәреслектәр — яңы быуын әсбаптары

*"Белемленең — биле нык", ти халык мәкәле. Белемле, һәр яклап үҫешкән һәм сәләмәт быуын тәрбиәләүгә республикабыҙҙа ҙур иғтибар бирелә. Әленән-әле яңы мәктәптәр, балалар баксалары сафка индерелә, укыу йорттары, физкультура-һауыктырыу, спорт комплекстары асыла. Улар заманса кора-малдар, йыһаздар, укыу әсбаптары менән байытыла. Мәктәптәр төҙөлөшө буйынса Рәсәйҙә Башкортостанға тиңләшеүсе төбәк юк. Йыл һайын беҙҙә 30-ҙан ашыу яңы мәктәп укыусыларҙы кабул итә. Тағы бер мөһим йүнәлеш — укыусыларҙы дәреслектәр менән тәьмин итеү эше лә юғары кимәлдә ойошторолған. Күп кенә дәреслектәр үҙебеҙҙә нәшер ителә. Улар сифатлы ак кағыҙға баҫылыуы, йөкмәткеһенең бай булыуы, матур биҙәлеше менән иғтибарҙы йәлеп итә. Һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙе дәреслектәр һәм укыу әсбаптары менән тәьмин итеү буйынса башкарылған эштәр, яңы дәреслектәр тураһында тулырак мәғлүмәт алыу максатында беҙ Башкортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының дәреслектәр һәм укыу әсбаптары бүлеге начальнигы Салауат Ғайса улы Кәримовка мөрәжәғәт иттек.*

***Салауат Ғайса улы Кәримов*** *1960 йылда Ишембай районының Ғүмәр ауылында тыуған. 1984—1986 йылдарҙа Күмертау калаһының "Ильич юлы" гәзитендә баш мөхәррир урынбаҫары вазифаһын башкара. 1986 йылда ул "Башкортостан пионеры" республика балалар гәзитенә баш мөхәррир урынбаҫары итеп эшкә сакырыла. Һуңынан "Йәшлек" гәзитендә — яуаплы сәркәтип, "Акбуҙат" балалар журналында баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләй, "Башкортостан" дәүләт телерадиокомпанияһында яуаплы вазифалар башкара. 1998 йылдан Салауат Ғайса улы Башкортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының дәреслектәр һәм укыу әсбаптары бүлеген етәкләй. Рәсәй Федерацияһының почетлы мәғариф хеҙмәткәре.*



**— Салауат Ғайса улы, үҙегеҙ етәкләгән бүлектең эшмәкәрлеге менән яҡынданыраҡ таныштырып үтһәгеҙ ине.**

— Мәғариф министрлығының дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары бүлеге мәктәптәрҙе дәреслектәр, методик һәм күргәҙмә әсбаптар менән тәьмин итеү өсөн яуаплы. Был эш дүрт йүнәлеш буйынса алып барыла. Беренсеһе — уҡыу йорттарын дәреслектәрҙең федераль комплекты менән тәьмин итеү. Бындай дәреслектәр Рәсәйҙең "Просвещение", "Дрофа" һәм башҡа нәшриәттәренән һатып алына. Әлеге көндә 20-нән ашыу нәшриәт менән килешеү төҙөлгән.

Икенсе йүнәлеш — дәреслектәрҙең төбәк (региональ) комплекты менән тәьмин итеү. Башҡортостанда төрлө милләт вәкилдәре йәшәй. Һәр балаға үҙ туған телен өйрәнеү өсөн мөмкинлектәр булдырыу маҡсатында ошо йүнәлеш буйынса эш алып барабыҙ. Уҡытыу татар, сыуаш, мари, мордва, удмурт телдәрендә алып барылған мәктәптәрҙең заказдарына ярашлы, дәреслектәр Мордва, Марий Эл, Удмурт, Татарстан, Сыуашстан Республикаларынан һатып алына.

Өсөнсө мөһим йүнәлеш — белем биреү учреждениеларын дәреслектәрҙең республика комплекты менән тәьмин итеү, йәғни һүҙ үҙебеҙҙең республикала ижад ителгән дәреслектәр хаҡында. Был дәреслектәр асыҡ конкурс нигеҙендә төҙөлә. Махсус программаға ярашлы, Мәғариф министрлығы "Һынлы сәнғәт", "Музыка", "Һыҙма" ("Черчение"), "Башҡортостан мәҙәниәте", "Башҡортостан географияһы" фәндәренән яңы дәреслектәр сығарыу өҫтөндә эшләй. Күп китаптар донъя күрҙе лә инде. Уларҙың төп маҡсаты — милли төбәк компонентын көсәйтеү. Һуңғы йылдарҙа шулай уҡ республикалағы татар мәктәптәре өсөн "Татар теле" дәреслектәрен үҙебеҙҙә әҙерләй башланыҡ. Был дәреслектәрҙәге лексик материалдар Башҡортостан яҙыусыларының әҫәрҙәренән алынған өҙөктәр, шиғырҙар, хикәйәләр менән байытылған. Хәҙер татар мәктәптәрендә "тыуған республикабыҙ — Башҡортостан", "баш ҡалабыҙ — Өфө" тип уҡыйҙар.

Беҙҙең эшмәкәрлектәге дүртенсе йүнәлеш — мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреү учреждениеларын күргәҙмә материалдар, аудио-, видеоәсбаптар менән тәьмин итеү. Был йәһәттән дә һуңғы йылдарҙа бик күп эштәр башҡарылды. Башҡортостан мәҙәниәте, тарихы, башҡорт әҙәбиәте һәм музыкаһы буйынса 23 видеоәсбап һәм 12 аудиоәсбап төҙөлөп, мәктәптәргә таратылды. Видеоәсбаптарҙа башҡорт халҡының тарихи шәхестәре С.Юлаев, Ә.Вәлиди, М.Мортазин, Т.Күсимов, М.Шайморатов хаҡында фильмдар, М.Ғафури, М.Кәрим, Н.Мусин, Р.Ғарипов, А.Солтанов, З.Бикбулатова һәм башҡа ижади шәхестәр тураһында яҙмалар бар. Айырым кассеталар халыҡ йырҙарына, башҡорт милли кейеменә, башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдарына арналған. Йола йырҙары яҙылған әсбаптар ҙа бар.

Күргәҙмә әсбаптарҙан "Башҡортостандың һынлы сәнғәте", "Башҡортостан Республикаһының дәүләт символдары", "Өфө — быуаттар аша" тип аталған, шулай уҡ композиторҙарҙың, рәссамдарҙың, театр актер-

ҙарының портреттарынан торған комплекттар, телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы һүрәттәр, башланғыс синыфтар өсөн ”Тыуған яғыңды бел һәм өйрән” тип аталған атлас сығарылды. Әйткәндәй, башҡорт телендә бындай атлас әлегә тиклем беҙҙә сыҡҡаны юҡ ине.

**— Мәктәптәрҙе дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары менән тәьмин итеү эше нисегерәк тормошҡа ашырыла?**

— Республика мәктәптәрен дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары менән тәьмин итеү ”Мәғариф тураһында”, ”Дөйөм белем биреү учреждениелары өсөн дәреслектәрҙең республика комплекты тураһында”, ”Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Башҡортостан Республикаһы законадарына һәм Хөкүмәттең ”Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрендә яңы дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары нәшер итеү һәм ғәмәлдәге дәреслектәрҙе камиллаштырыу тураһында” маҡсатлы программаһына ярашлы бойомға ашырыла. Мәғариф министрлығында ғалимдарҙан, юғары уҡыу йорттары уҡытыусыларынан, район-ҡала мәғариф бүлеге методистарынан торған Уҡытыу-методик һәм Эксперт советтары эшләй. Уҡытыу-методик советында беҙ үҙебеҙҙең республика комплектына ингән дәреслектәрҙе тикшерәбеҙ, артабан ыңғай баһа алған дәреслек, уҡыу әсбабы йәки методик әсбап нәшергә тәҡдим ителә. Эксперт советында иһә Рәсәй Федерацияһының Мәғариф министрлығы тәҡдим иткән дәреслектәр араһынан республика мәктәптәренә ярашлылары һайлап алына. Әйтәйек, Рәсәй буйынса математика, физика, химия һәм башҡа фәндәрҙән төрлө мәктәптәр өсөн етешәр-һигеҙәр параллель дәреслектәр булһа, беҙҙә төп дәреслек һәм шуға өҫтәп бер йәки ике вариатив дәреслек кенә алына. Был уҡытыусылар өсөн дә уңайлы, уҡыусыларҙы, ата-әсәләрҙе лә әҙме-күпме мәшәҡәттәрҙән азат итә. Әлбиттә, ҡайһы бер тәрән өйрәнелгән фәндәр буйынса икешәр-өсәр дәреслек булыуы ла ихтимал. Шулай уҡ Эксперт советында ниндәй дәреслектәрҙе башҡорт телендә сығарыу мәсьәләһе хәл ителә. Эксперт советының эшмәкәрлеге һәр фәндән айырым секциялар буйынса ойошторолған. Мәҫәлән, физика секцияһында тик физика дәреслектәре генә ҡарала.

**— Һуңғы йылдарҙа үҙебеҙҙә нәшер ителгән дәреслектәр хаҡында ни әйтерһегеҙ?**

— Йыл һайын Башҡортостанда ете тиҫтәгә яҡын дәреслек нәшер ителә. Уларҙың 90—100 мең дана менән сыҡҡандары ла бар. Әйтәйек, Башҡортостан мәҙәниәте, тарихы, географияһы фәндәре буйынса сығарылған дәреслектәрҙең һәр береһенең тиражы 100 мең дананан да ашып китә.

Һуңғы йылдарҙа ғына республика мәктәптәре 100-ҙән ашыу өр-яңы дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары алып һөйөндө: мәҫәлән, урыҫ мәктәптәре өсөн ”Башҡорт теле” (1—9-сы синыф), ”Башҡортостан мәҙәниәте” (5—10-сы синыф), ”Татар теле” (2—7-се синыф), ”Инглиз теле” (5—7-се синыф), ”Һынлы сәнғәт” (1—4-се синыф), ”Музыка”нан хрестоматия

(1—6-сы синыф), ”Умартасылыҡ” (10—11-се синыф), балалар баҡсалары өсөн башҡортса уҡыу китабы һәм башҡалар.

Уҡытыусылар өсөн дә бик күп методик ҡулланмалар донъя күрҙе. Мәҫәлән, ”Мостай Кәрим педагогикаһы”, ”Йәш уҡытыусыға ярҙамға”, ”Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр”, ”Телдең күркәмлек саралары”, ”Риторика”, ”Башҡорт фольклоры”, ”Салауат батыр — ил күрке” һәм башҡалар.

Һуңғы 10—15 йыл эсендә мәктәптәрҙә уҡыу программаһына индерелгән әҫәрҙәрҙе өйрәнеү өсөн художестволы әҙәбиәт менән тәьмин итеү эше туҡтап ҡалғайны. Мәғариф министрлығы был проблеманы хәл итеүҙең үҙенсәлекле юлын тапты. ”Мәктәп китапханаһы” серияһын тергеҙеп, башҡорт яҙыусыларының йыйынтыҡтарын сығара башланыҡ. Был серияның тәүге китабы Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең әҫәрҙәренән тупланды. Сираттағы йыйынтыҡҡа күренекле шағир һәм яҙыусы Баязит Бикбайҙың әҫәрҙәре инде. Ул 2004 йылда нәшер ителде. Быйыл Башҡортостандың күренекле яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшина әҫәрҙәренән тупланған йыйынтыҡ сығарҙыҡ. Киләһе йылдарҙа ла был эште дауам итәсәкбеҙ. Әлеге көндә Ғәйнан Хәйриҙең йыйынтығы әҙерләнгән. Салауат Юлаев, Шәйехзада Бабич, Мифтахетдин Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов һәм башҡаларҙың әҫәрҙәре лә яҡын киләсәктә ошо серияла донъя күрәсәк.

**— Дәреслектәр яҙыу, уларҙы баҫтырып сығарыу, мәктәптәргә таратыу бик күп сығымдар талап итәлер...**

— Ысынлап та, мин һанап үткән һәм әле әйтелмәгән уҡыу әсбаптарын сығарыу өсөн бик ҙур сығымдар талап ителә. Республикабыҙ етәкселеге ярҙамынан тыш был эштәрҙе атҡарып булмаҫ ине. Дәреслектәр сығарыу өсөн шундай мөмкинлектәр булдырылыуына, балаларыбыҙ күҙҙең яуын алып торған матур дәреслектәр буйынса уҡыуына беҙ тәү сиратта республика етәкселәренә бурыслыбыҙ. Шуға өҫтәп әйтергә теләйем: мәктәп уҡыусыларына, уҡытыусыларға дәреслектәрҙең ҡәҙерен белеп уҡырға һәм эшләргә кәрәк.

**— Белеүебеҙсә, Башҡортостанда уҡыусылар дәреслектәр менән бушлай тәьмин ителә. Бындай тәжрибә Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә ҡулланыламы?**

— Рәсәйҙә бер нисә төбәктә генә мәктәп уҡыусылары дәреслектәр менән бушлай тәьмин ителә. Әлбиттә, Башҡортостан был өлкәлә айырыуса ҙур эш башҡара. Сөнки ошо йүнәлештә эшләгән башҡа төбәктәрҙе алып ҡараһаҡ, уларҙың күбеһендә дәреслектәр менән тәьмин итеү өлөшләтә генә башҡарыла, йәғни аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән булған уҡыусыларға ғына дәреслектәр бушлай таратыла. Ә беҙҙә 1-се синыфтан алып 11-се синыфҡа тиклем барлыҡ уҡыусылар ҙа дәреслектәр менән бушлай файҙалана. Йәғни алдан бирелгән заказдар буйынса дәреслектәр мәктәп китапханаларына тапшырыла һәм уҡыу йылының тәүге көнөндә үк уҡыусыларға таратып бирелә. Бынан тыш, Мәғариф министрлығы Ырымбур, Силәбе, Һарытау, Свердловск, Төмән,

Пермь өлкәләре һәм Ханты-Манси автономиялы округындағы мәктәптәрҙе, Силәбе һәм Ырымбур дәүләт педагогия университеттарын башҡорт телендә сыҡҡан дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары менән тәьмин итә. Был сығымдар ҙа республика ҡаҙнаһынан ҡаплатыла. Башҡортостанда был эш һәйбәт ойошторолған.

**— Иҫемдә, элегерәк дәреслектәрҙе гел бер үк кешеләр төҙөй ине, хәҙер иһә яңы исемдәр күренә...**

— Мәғариф министрлығы дәреслек авторҙары араһында ла әүҙем эш алып бара. Авторҙарҙың, уҡытыусыларҙың ҡатнашлығында республика күләмендә кәңәшмәләр һәм семинарҙар үткәрелә. Әлеге көндә тәжрибәле дәреслек авторҙары менән бер рәттән әүҙем эшләгән йәш авторҙарыбыҙ ҙа бар. Улар — Мәрхәбә Дәүләтшина, Фәниә Сынбулатова, Эльза Пурик, Зәкиә Ғәбитова, Рәйсә Күзбәкова, Илгизәр Бураҡаев, Рида Хөсәйенова, Фәнисә Ғафурова, Лотфулла Хәбибов һәм башҡалар.

**— Электрон дәреслектәрҙе уҡыу-уҡытыу процесында сағыштырмаса яңы күренеш, тип әйтергә мөмкин. Республика мәктәптәре өсөн тәғәйенләнгән иң тәүге электрон дәреслек ҡасан сыҡты һәм ул ниндәй фән буйынса ине?**

— Мәғариф министрлығы тарафынан тәүге электрон дәреслек бынан өс йыл элек сығарылғайны. ”Башҡортса өйрәнәйек” тип атала ул. Урыҫ мәктәптәрендә уҡыған башҡорт балалары, шулай уҡ башҡорт телен яңы өйрәнә башлағандар өсөн дә тәғәйенләнгән дәреслек күберәк үҙ-ара һөйләшеүҙе камиллаштырыу, телде шымартыу маҡсатында һүҙҙәрҙе ятлау, дөрөҫ әйтергә өйрәнеү ниәтенән сығып төҙөлгән. Унда дикторҙың тауышына эйәреп һөйләү ҙә, һуңынан үҙеңдең уҡыған, яҙған эшеңде тикшереү һәм уларҙы баһалау ҙа бар.

**— Күптән түгел генә ”Башҡортостан мәҙәниәте”нән электрон дәреслек донъя күрҙе. Ошо дәреслек тураһында һәм, ғөмүмән, компьютер дәреслектәренең нисек ижад ителеүе хаҡында һөйләп үтһәгеҙ ине.**

— Тәүҙә Мәғариф министрлығы ваҡытлы матбуғат аша компьютер дәреслеге йәки дәреслектең электрон вариантын төҙөү тураһында асыҡ конкурс иғлан итә. Ғәҙәттә, беҙ ошо йүнәлештә әүҙем эшләгән ”Новая экономическая газета” менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ. ”Башҡортостан мәҙәниәте” буйынса электрон дәреслеккә лә шундай асыҡ конкурс иғлан ителде. Конкурста алты дәғүәсе, шул иҫәптән Башҡорт дәүләт университеты, Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Өфө нефть техник университеты, БДПУ эргәһендәге уҡыу-педагогика үҙәге ҡатнашырға теләк белдерҙе. Конкурс ике баҫҡыстан тора. Беренсе баҫҡыста конкурсанттар документ һынауын үтә. Бында уларҙың ниндәй ойошма икәнлеге, һалымдар түләү-түләмәүе, бухгалтерия өлкәһендәге эштәре һәм ошондай заказды башҡара алыу һәләтлеге ҡарала. Беренсе турҙы уңышлы үткән авторҙар коллективы икенсе турҙа конкурстың йөкмәткеһе буйынса туранан-тура эш алып бара. Дәреслек ниндәй программа буйынса төҙөлә, ниндәй темаларҙы үҙ эсенә ала, бер компакт-дискы күпме то-

расаҡ, ғөмүмән, программа төҙөү һәм дөйөм тираж өсөн күпме сығым кәрәк буласаҡ — былар барыһы ла икенсе этапта ҡарала. Конкурс комиссияһы ошо ике тур һөҙөмтәһе буйынса еңеүсене билдәләй һәм уның менән килешеү төҙөй. "Башҡортостан мәҙәниәте" дәреслеге буйынса ошондай һынауҙарҙы үтеп, Өфө дәүләт нефть-техник университеты белгестәре еңеүсе тип танылды. Ә текст авторҙарына килгәндә — улар бер нисәү. Электрон дәреслек, ғөмүмән, авторҙар коллективының хеҙмәт емеше ул.

**— Яңы мультимедия дәреслеге нисәнсе синыфтар өсөн тәғәйенләнгән һәм ниндәй темаларҙы үҙ эсенә ала?**

— Дәреслек урта мәктәптең 5—10-сы синыф программаһына ярашлы төҙөлдө. Бөтәһе 30 дәрес темаһы ингән. Улар видео- һәм слайд-фрагменттар рәүешендә бирелә. Һәр береһенә ҡарата дикторҙың аңлатмаһы ла бар. Шулай уҡ һәр дәрес айырым текст формаһында ла ҡабатлана.

Дәреслек менән эшләгәндә уҡыусылар башҡорт халҡының легендалары, риүәйәттәре, ауыҙ-тел ижады менән таныша ала. Сағыу төҫтәге слайдтар биҙәү сәнғәте һәм һынлы сәнғәт, милли кейемдәр, биҙәүестәр хаҡында һөйләй. Халҡыбыҙҙың күренекле фән, әҙәбиәт, сәнғәт әһелдәре менән дә таныштыра дәреслек. Шулай уҡ был әсбапта терминдар һүҙлеген дә, аңлатмалы һүҙлекте лә, билдәле шәхестәр тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт тә, әҙәбиәт исемлеген дә табырға мөмкин.

Дәреслекте шартлы рәүештә ике өлөшкә бүлеп ҡарарға була: беренсеһе — уҡыу, өйрәнеү өсөн, икенсеһе — уҡыусының дәрестә үҙләштергән белемен баһалау өсөн тәҡдим ителгән материалдар. Бында уҡыусыларға үҙаллы эшләү өсөн төрлө күнегеүҙәр, текстар, викториналар, башватҡыстар бирелә. Башҡарған эше өсөн уҡыусы шунда уҡ баһаһын да ала. Баһаны уға уҡытыусы түгел, ә компьютерҙағы йәнләндерелгән персонаждар ҡуя. Мәҫәлән, ҡанатын елпеп талпыныусы аҡҡош "бишле" билдәһен аңлата.

**— Һеҙҙең ҡарашҡа, электрон дәреслектең ғәҙәти дәреслектәрҙән айырмаһы һәм өҫтөнлөгө нимәлә?**

— Электрон дәреслек дәресте заман технологияларын ҡулланып үткәреү мөмкинлеге бирә, уҡыусыларҙы компьютер менән эшләргә өйрәтә. Яңы дәреслек электрон уҡыу әсбаптарына ҡуйылған талаптарға ярашлы төҙөлгән һәм уның менән эшләү уҡыусылар өсөн бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Мультимедия дәреслеге уҡыусыларҙа уҡыуға ҡарата ыңғай ҡараш уята. Улар бындай дәрестәргә ҙур теләк һәм ҡыҙыҡһыныу менән йөрөйәсәк. Йәнә, баһаны уҡытыусы түгел, ә компьютерҙағы персонаждарҙың ҡуйыуы ла уҡыусының ҡыҙыҡһыныуын, белем алырға ынтылышын арттырасаҡ. "Дөрөҫ" йәиһә "бик яҡшы" тигән баһа алыу өсөн генә лә бер үк эште ҡабат-ҡабат эшләп ҡараясаҡ ул.

Дәреслектең тағы бер өҫтөнлөгө шунда: ул уҡытыусыға дәрес үткәреүҙе күпкә еңелләштерә, сөнки бөтә күргәҙмә материалдар ҙа

тиерлек ҡул аҫтында. Билдәле шәхестәрҙең портреттары, таблицалар, картиналар һәм башҡалар. Бер генә миҫал: дәреслек ярҙамында Өфө ҡалаһында урынлашҡан театрҙарға тотош бер "сәйәхәт" ҡылырға мөмкин.

Бынан тыш, һәр дәрескә ҡарата әллә күпме өҫтәмә материал бар, йәғни йөкмәткеһе бик бай, тип әйтер инем. Компакт-дисктың бик еңел булыуы һәм уҡыусының портфелендә күп урын алмауы менән дә иғтибарға лайыҡ ул. Ә инде уҡыусының өйөндә компьютер бар икән, ул бөтә темаларҙы шунда яҙҙыра ала. Миненсә, яңы дәреслектең өҫтөнлөктәре бик күп. Киләсәктә бындай дәреслектәр мәктәптәрҙә төп уҡыу әсбаптарының береһе буласаҡ. Әммә был традицион дәреслектәр — китаптар булмаясаҡ тигәнде аңлатмай, әлбиттә. Улар һаҡланып ҡаласаҡ. Уҡытыусыға ижади эшләргә, дәресте күңеллерәк, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә мөмкинлек артасаҡ.

**— Яңы дәреслекте уҡытыусылар нисек ҡабул итте?**

— "Башҡортостан мәҙәниәте" буйынса мультимедия дәреслеге донъя күргәс тә Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтында Мәғариф министрлығы, республика вуздары вәкилдәре, курс үтеп йөрөүсе уҡытыусылар ҡатнашлығында дәреслектең исем туйы үтте. Бында яңы дәреслек буйынса асыҡ дәрес ҡарау, һуңынан түңәрәк өҫтәл артында һөйләшеү булды. Осрашыуҙа ҡатнашыусы белгестәр тарафынан дәреслек бик юғары баһаланды. Уларҙың фекерен дауам итеп, мәғариф министры урынбаҫары Миңлебай Бәхтиәр улы Юлмөхәмәтов: "Башҡортостан мәҙәниәте" фәнен мәктәптәрҙә яңы өйрәнә башлаған осор менән әлеге мәлде, әлбиттә, сағыштырырлыҡ түгел. Ул ваҡытта дәреслектәр ҙә, уҡыу һәм күргәҙмә әсбаптар ҙа юҡ ине. Уҡытыусыларға дәрес үткәреү өсөн материалды үҙҙәренә туплағыа тура килһә, хәҙер иһә бөтә мөмкинлектәр һәм шарттар ҙа булдырылған. Ә бындай дәреслектәр менән иһә дәресте рәхәтләнеп үткәрергә мөмкин", — тип белдерҙе.

**— Әлеге ваҡытта ниндәй дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары әҙерләнә?**

— Күптән түгел Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығы айҡанлы Мәғариф министрлығы Советтар Союзы Геройы исемен йөрөткән һәм Дан ордендарының тулы кавалерҙары булған уҡытыусыларға бағышланған китап сығарҙы. Әлеге көндә 2006 йылда донъя күрәсәк дәреслектәр һәм уҡыу-методик әсбаптарҙың ҡулъяҙмалары әҙерләнә. Бынан тыш, дүрт һүҙлек: башҡортса-русса, русса-башҡортса, башҡорт теленең орфографик һәм аңлатмалы һүҙлектәрен әҙерләү эш өҫтөндә. Электрон дәреслектәр сығарыу буйынса ла эште дауам итергә ниәтләйбеҙ. Киләсәктә 9—11-се синыфтар өсөн башҡорт теленән һәм телмәр үҫтереү буйынса электрон дәреслек сығарыу күҙ уңында тотола.

*Сажиҙә ЛОТФУЛЛИНА әңгәмәләште.*